*Рафаэль АҘНАҒОЛОВ,*
*педагогия фәндәре докторы*

# Көнсығыштың рухи ҡөҙрәте

2005 йыл башҡорт әҙәбиәте ғилеме өлкәһендә һынылыш йылы булды, тип әйтер инем. Әҙәбиәт фәне донъяһында яңы тармаҡ, яңы йүнәлеш барлыҡҡа килде. Башҡорт әҙәбиәте ғилеме методологияһында өр-яңы фәнни нигеҙ, таяныс хасил булды. Бөгөнгө көндә әҙәбиәт фәне, әҙәби тикшеренеүҙәр өлкәһендә яңы һүҙ әйтеү, яңы йүнәлеш табыу, яңы концептуаль проблемаларҙы хәл итеү — һирәк күренештәрҙең береһелер. Шулай булыуға ҡарамаҫтан, күренеш тип һанарлыҡ хеҙмәттәр тыуып тора. Мәҫәлән, ”Ғилем” нәшриәтендә профессор Роберт Нурмөхәмәт улы Байымовтың ”Великие лики и литературные памятники Востока” тигән бик тә күләмле, ғәйәт тәрән мәғәнәле фундаменталь хеҙмәтен өр-яңы күренеш тип атарға хаҡлымындыр.

Бөгөнгө осорҙа, йәғни фәҡирлек һәм ҡытлыҡ заманда китап сығарыу башҡорт әҙәбиәте донъяһында ғына түгел, тотош Рәсәй күләмендә ҙур бер күренеш булып тора. Бындай рухи хазинаны баҫтырып сығарыу Башҡортостан Фәндәр академияһының фундаменталь тикшеренеүҙәр фонды менән Башҡорт дәүләт университетының финанс ярҙамы арҡаһында бойомға ашты. Рәхмәт был ойошмаларға.

Был хеҙмәттең актуаллеге уның тәү тапҡыр донъя күреүе менән генә билдәләнмәй. Рәсәй халыҡтары, улай ғына ла түгел, тотош донъя әҙәбиәте үҫешендә Көнсығыштың рухи балҡыштары, рухи көсө һүҙ сәнғәте методологияһында иҫәпкә алынманы. Быға тиклемге Рәсәй әҙәбиәте тарихында үтә тар, сикләнгән ҡараш йәшәп килде. Йәнәһе лә, башҡа халыҡтарҙың милли әҙәбиәте үҫешенә фәҡәт урыҫ әҙәбиәте киң юл асты, уларҙың яҙма теле һәм мәҙәниәте бары тик Бөйөк Октябрь революцияһынан һуң ғына барлыҡҡа килә һәм артабан үҫә башлай. Бындай рухи торғонлоҡ осоронда һүҙ сәнғәтенең методик һәм методологик нигеҙе лә ялған гипотезаға ҡоролдо. Донъя әҙәбиәте үҫешендә Көнсығыштың аҡыл көсө, эшмәкәрлеге лә нигеҙ булып тороуы инҡар ителде. Совет власы тип аталған донъя телебеҙ тарихының, әҙәбиәтебеҙҙең һәм тотош этнокультурабыҙҙың тәрән тарихи тамырҙарын киҫте, тарихи дөрөҫлөктө быуып килде. Соцреализм, партиялылыҡ кеүек ялған методтар һәм методологик принциптар этнокультура үҫешендә кәртә булып торҙо. Шуға күрә Р.Н.Байымовтың был хеҙмәте рухи донъябыҙға күҙҙе асыңҡырап ҡарарға, тарихи тамырҙарыбыҙҙың тәрәнлеген күрә белергә өйрәтә, рухи офоҡ

ҡапҡаларыбыҙҙың ҡайһы тарафта булыуын күрһәтә. Хеҙмәттең актуаллеге лә, фәнни яңылығы ла, фәнни-теоретик әһәмиәте лә ана шундалыр, минеңсә.

Һүҙ сәнғәте тарихының тәрән тамырҙары ҡайҙа йәшеренгән? Тәүге поэтик һүҙ ниндәй формала, йөкмәткелә һәм мәғәнәлә булған? Билдәле булыуынса, һүҙ — донъя картинаһын танып белеү сараһы һәм мөнәсәбәте. Тимәк, уның йөкмәткеһендә мөнәсәбәт ята. Һүҙ — аң менән аҡыл синтезы. Уға тәрән философик (аң, аҡыл) ҡараш, психологик (фекерләү, рухи булмыш) хәл менән бер рәттән, поэтика (моң) мәғәнәһе лә һалынған. Ул ғына ла түгел, һүҙҙә этик (әҙәп-әхлаҡ), эстетик (һоҡланыу) мәғәнә, асыл һәм, ғөмүмән, халыҡтың этнокультураһы ята. Әҙәбиәт тип аталған донъя үҙенең формалашыуында һәм артабан үҫешендә ошо мөнәсәбәттәргә нигеҙләнә.

***

Хеҙмәттең инеш өлөшөндә донъя культураһының Көнсығыш тамырҙары ("Восточные корни мировой культуры") тураһында һүҙ бара. Һуңғы йылдарҙа, бигерәк тә Союз емерелеп, ҙур ватаныбыҙ тип йөрөткән илдә донъяла булмаған йәмғиәт (сөнки беҙ элек капиталистик тип йөрөткән Көнбайыш илдәре социаль йәмғиәттәр ҡороп өлгөрҙө) барлыҡҡа килгәс, "евразиясылыҡ" тигән төшөнсә уйлап таптылар. Урыҫ шовинизмы яҡлыларҙың һаман да Европаны беренсе итеп күрһәтергә тырышыуҙары ошо һүҙ яһалышында ла сағыла. Был ҡушма һүҙҙең тәүгеһе Азия булырға тейеш икәне һуҡырға ла күренәлер. Бөтә кимәлдәр, күрһәткестәр (теүәл фәндәрҙәге асыштар, тәғлимәттәр, әҙәбиәт, дин һәм, ғөмүмән, барлыҡ этнокультура тармаҡтарының үҫеше) буйынса ла донъя халыҡтары мәҙәниәтенең үҫеше Боронғо Көнсығыштан көс алыуы һәр кемгә мәғлүм. Илаһи яҡтылыҡ та Көнсығыштан тарала түгелме ни?

Әйтергә кәрәк, барлыҡ дини тәғлимәт (иудаизм, буддизм, христиан, ислам) һәм уға нигеҙ һалыусыларҙың Көнсығыштан булыуы ла рухи ҡибланың ҡайһы тарафтан икәнен күрһәтәлер. Профессор Р.Н.Байымов был хаҡта аныҡ рәүештә әйтеп биргән: Моисей Египетта, Будда Һиндостанда, Христос Иерусалим эргәһендә, Мөхәммәт Мәккәлә тыуған. Ул ғына ла түгел, был диндәрҙең тамырҙары шаҡтай боронғо осорҙағы дингә (беҙҙең эраға тиклем II—I мең йыллыҡ) — зороастризмға барып тоташа. Зороастризмға нигеҙ һалыусы Заратуштра ла Шәреҡтә тыуған һәм йәшәгән. Донъя диненең төп тәғлимәте, ҡанундары зороастризмдан алынған. Зороастризм — мәжүсилек тип аталған дини тәғлимәт. Бөгөнгө башҡорт, татар, сыуаш халыҡтарының йәшәү рәүешендәге телгә мөнәсәбәтле, мифологик, космологик билдәләр, топонимик йәнәшәлектәр, орнаменттарҙың, йолаларҙың, ҡайһы бер ғөрөф-ғәҙәттәрҙең, байрамдарҙың мәжүсилек нигеҙҙәре боронғо иран халыҡтарыныҡы менән тап килә. Быларҙың да сығанағы зороастризмда ята.

Р.Н.Байымовтың күҙәтеүенсә, "Көнсығыш тулҡыны" диндә генә түгел, донъяуи тормошта ла сағылыш тапҡан. Европаның Ренессансы (Яңырыу эпохаһы) ла Көнсығыш культураһынан һут алған. Мәҫәлән, Боккачоның "Декамерон" әҫәре үҙенең ҡайһы бер мотивтары һәм поэтик

ҡоролошо менән ”Синдбаднамә”нең (Синдбад китабының), йәки ”Мең дә бер кис”тең, тағы ла боронғораҡ булған ”Панчатантра”, йәки ”Махабхарата” кеүек һинд әҫәрҙәренең логик дауамы икәне күренеп тора. Гёте, Крылов, Толстой, Пушкин һәм башҡа бик күп ҡәләм оҫталары Көнсығышҡа битараф булмаған.

Татар әҙәбиәтенең классигы Ғабдулла Туҡайҙың ”Яңы киҫек баш”, ”Шүрәле” әҫәрҙәренең сюжеты боронғо һинд (IV быуат) халҡының ”Панчатантра”һындағы хикәйәләрҙең берәүһен хәтерләтә. Мәҫәлән, Туҡайҙың Шүрәлеһе, бүрәнәләге шынаны алып, бармағын ҡыҫтырһа, ”Панчатантра”ла Маймыл йән ерен ҡыҫтыра.

Башҡорт, татар һәм башҡа төрки телле әҙәбиәттәр үҫешендәге Көнсығыш тамырҙарын бер нисек тә инҡар итеп булмайҙыр. Р.Н.Байымовтың әйтеүенсә, оҙаҡ йылдар буйы (совет осоронда) милли әҙәбиәттәр үҫешендә урын алған Көнсығыштың орнамент, метафора, романтик биҙәктәренә, ҡатмарлы образлылыҡҡа кире ҡараш йәшәп килде. Әҙәбиәттәрҙәге Көнсығыш тулҡынын ҡәҙимселек (иҫкелекте яҡлаған алым) тип баһалау хөкөм һөрҙө. Әҙәби процесҡа быны ҡараш нәфис, күркәм һүҙ сәнғәтенең ҡөҙрәтле тәрән тамырҙарын халыҡ хәтеренән юйырға тырышыу сәйәсәте булғандыр.

Шуға ҡарамаҫтан, Көнсығыштың сағыу рухи балҡыштары әҙәбиәт үҫешендә ныҡлы урын ала килде. ”Мең дә бер кис”, ”Панчатантра”, ”Камасутра”, ”Синдбаднамә”, ”Кабус китабы” кеүек мәшһүр ҡомартҡылар, Ләйлә менән Мәжнүн, Йософ үә Зөләйха, Таһир һәм Зөһрә тураһындағы саф мөхәббәт ҡиссалары, Хужа Насретдин тураһындағы көләмәстәр, күсеп йөрөүсе сюжеттар булып, урындағы материалдар менән тулыландырылып, төрки-ғәрәп-фарсы телле халыҡтарҙың милли әҙәбиәтен, профессиональ әҙәбиәтен формалаштырыуҙа ҙур роль уйнаны.

Сал тарих төпкөлөндәге Көнсығыш ҡомартҡылары йәки уларҙың өҙөктәре ирекле һәм ижади тәржемә рәүешендә, үҙенсәлекле милли хазина булып, донъя халыҡтары әҙәбиәтендә ныҡлы урын алған. Әйтәйек, ”Панчатантра” (”Биш китап”), боронғо һинд ҡомартҡыһы булһа ла, ғәрәп-иран телдәрендә ”Калила һәм Димна”, грек телендә ”Стефанит һәм Ихнилат”, төрөктәрҙә ”Гамайюннамә” (”Мөһабәт китап”), урыҫтарҙа ”Пильпай мәҫәлдәре” исемдәрен алып үҙләшеп киткән.

Һуңыраҡ фарсы телле Көнсығыштан Үҙәк һәм Урта Азия, Урал-Волга төркиҙәренең әҙәбиәтенә, рухи тормошона суфыйсылыҡ, йәҙҙитселек, мәғрифәтселек кеүек йүнәлештәр килеп инә.

Шулай итеп, донъя әҙәбиәтендә, кешелек тарихында Көнсығыш балҡыштарының роле бик ҙур. Профессор Р.Н.Байымов был хеҙмәттең инеш өлөшөндә шундай һығымта яһай: ”Евразиялыҡ проблемаһының бер өлөшө булған Көнсығыш менталитеты — беҙҙең үткәнебеҙ һәм бөгөнгөбөҙ. Уны өйрәнеү беҙҙең рухи-әхлаҡи тәжрибәбеҙҙе, донъяны танып белеүебеҙҙе, аңлап белеүебеҙҙе байытыуға күп яңылыҡ вәғәҙә итә. Һәр халыҡ үҙенең тулы һәм дөрөҫ тарихын, бөйөк мәҙәниәткә индергән өлөшөн белергә тейеш. Был, ҡыҙғанысҡа ҡаршы, әле һаман тарихты ла, мәҙәниәтте лә үҙ мәнфәғәтенә борорға тырышыусыларға ҡаршы торорға ярҙам итер, халыҡтарҙың үҙ-ара мөнәсәбәтен, бәйләнешен нығытыр ине”.

Артабанғы төп бүлектәрендәге проблемаларҙы тулыраҡ күҙ алдына килтереү өсөн хеҙмәттең инеш өлөшөн киңерәк яҡтыртырға тырыштыҡ.

***

Китаптың беренсе бүлеге ”Көнсығыш әҙәбиәтенең үҙенсәлектәре һәм сығанаҡтары” тип атала.

Көнсығыш әҙәбиәте... Һуңғы ваҡытта был һүҙ төрлө тикшеренеүҙәрҙә, публицистик мәҡәләләрҙә, теге йәки был әҙәбиәттең тарихи үҫеше хаҡында яҙмаларҙа, эҙләнеүҙәрҙә йыш яңғырай башланы. Ә нимә һуң ул Көнсығыш әҙәбиәте? Быға автор ҡытай, япон, һинд, ғәрәп, иран, төрки, вьетнам, монгол һәм башҡа халыҡтарҙың әҙәбиәтен индерә. Географик яҡтан ҡарағанда, Көнсығыш әҙәбиәтенә Азия, Яҡын, Урта һәм Алыҫ Көнсығыш, Урал һәм Волга буйы территорияларында йәшәүсе халыҡтарҙың әҙәбиәттәре инә. Көнсығыш нәфис һүҙенең сиктәре лә, таралыу донъяһы ла бик ҙур, офоҡтары ла бик киң, ҡәләм оҫталары ла төрлө-төрлө һәм күп милләтле. Көнсығыш әҙәбиәтенең йөкмәткеһе лә бик ҡатмарлы, мәғәнәһе лә ғибрәтле һәм фәһемле. Был әҙәбиәттең тауышы бик тә үҙенсәлекле: тау, дала, һыу, урман, ер һәм һауа моңдарының йыйылмаһы.

Көнсығыш әҙәбиәтенең сығанаҡтары ла ғәжәйеп тәрән һәм сал тарихлы. Мәҫәлән, XIV—XV быуаттарға тиклем барлыҡ иран халҡы, ғәрәп һәм төрки телле халыҡтар фарсы телле әҙәбиәт донъяһында йәшәйҙәр. Был әҙәбиәттә төрлө милләттәрҙән килеп ингән үҙ даһиҙары бар. Әзербайжан шағиры-аҡыл эйәһе Низами Ғәнджәүи (XII быуат) тәү тапҡыр фарсы телле үҙаллы биш бүлектән торған хамсаһын ижад итә. Бына улар: ”Серҙәр хазинаһы”, ”Хөсрәү һәм Ширин”, ”Ләйлә һәм Мәжнүн”, ”Ете һылыу”, ”Искәндәрнамә”. Былар инде көнсығыш әҙәбиәте жанрҙарының классик өлгөһө. XVI быуатта төрөк әҙәбиәте формалаша. Уның нигеҙендә XV быуаттағы Алишер Науаиҙың ижады һәм фәнни трактаттары — ”Ике телдең бәхәсе”, ”Көй үлсәмдәре” (”Мизан әл авзан”) төп урынды биләй.

Р.Н.Байымовтың билдәләүенсә, Көнсығыш әҙәбиәтенең тарихи ”йәше” лә, үҫеш кимәле лә бер төрлө түгел. Һинд, ҡытай, иран әҙәбиәттәренең боронғо тамырҙары бар. Һинд эпик ҡомартҡылары ”Панчатантра”, ”Махабхарата”, ”Камасутра”, ”Рамаяна” һәм башҡалар, Ирандың (зороастризм), Ҡытайҙың (конфуцианлыҡ) дини әҙәбиәттәре бик тә боронғо, ҡайһы берҙәре хатта беҙҙең эраға тиклемге замандарҙа барлыҡҡа килгән. Ғәрәп, япон, төрөк әҙәбиәттәре һуңыраҡ осорҙа, беҙҙең эра баштарында һәм урта быуаттарҙа формалаша. Күпселек төрки халыҡтарының профессиональ, үҙ телдәрендә ижад ителгән әҙәбиәттәре ”яңы дәүерҙә” — беҙҙең эраның XVIII—XIX быуаттарында үҫеш алған. Әммә был ҡәүемдәрҙең халыҡ ижады, ораторлыҡ сәнғәте ныҡ үҫешкән.

Китап авторы шуны ла асыҡлай: боронғо менән сағыштырмаса ”йәш” әҙәбиәттәрҙең дә үҫеш юлы бер-береһенә оҡшаш. ”Йәш” әҙәбиәттәр (ғәрәп, япон, төрөк) үҙҙәренең формалашыуында боронғо әҙәбиәттәр (ҡытай, һинд, иран) үткән юлдарҙы ҡабатлай. Бына ул юлдар:

— фольклорға күсә барыусы дөйөм халыҡ ауыҙ-тел ижады;
— ораторлыҡ сәнғәте (әкиәтселәрҙең, сәсәндәрҙең, шағирҙарҙың, баҡшиларҙың һәм башҡаларҙың ижады);
— авторҙары яҙған (профессиональ) ижад.

Профессор Р.Н.Байымов үҙенең хеҙмәтендә Көнсығыш әҙәбиәтенең үҙенсәлекле тарихи факторҙарына ла иғтибар бирә. Мәҫәлән:

— япондар үҙҙәренең конфуцианлыҡ ҡанундары менән бергә, ҡытайҙарҙың яҙмаһын — иероглифтарҙы ла (VI быуат тирәһе) ҡабул итә. Артабан үҙҙәренең ижек алфавитын (IX быуат тирәһе) төҙөйҙәр;

— ғәрәптәр, төркиҙәр яҙыу өсөн боронғо антик әҙәбиәттең материалын ҡулланыу менән бергә, шул ваҡытта уҡ уйлап табылған ҡағыҙҙы файҙалана башлайҙар. Аҙаҡ инде, антик, боронғо әҙәбиәттәр кеүек үк, был ”йәш” әҙәбиәттәр ҙә үҙҙәренең тәүге үҙенсәлекле китаптарын, изге китаптарҙы ижад итәләр:

— япондар ”Кодзики”, ”Нихонги”ны (VIII б.);

— ғәрәптәр Ҡөрьәнде (VII б.). Ҡөрьән үҙ сиратында төркиҙәрҙең боронғо ”Уғыҙнамә” йыйылмаһын, тәңреселек менән бәйле китаптарын ҡыҫырыҡлап сығара;

— ирандар ”Авеста”ны (зороастризм) ижад итә. Бына ошоларҙан китап әҙәбиәте башланып китә.

Көнсығыш әҙәбиәтенең үҫешендә дөйөм бер законлылыҡ бар. Ул да булһа — халыҡ мифологияһы, халыҡтың ауыҙ-тел ижады. Шуның өсөн дә әҙәбиәттә ысынбарлыҡ менән фантастика һығымтаһы (синтез) өҫтөнлөк ала.

Көнсығыш нәфис һүҙ сәнғәтенең үҙенсәлекле шиғри системаһы, шиғыр төҙөлөшө, строфаларҙың поэтик үҙаллылығы (бәйет), поэтик жанрҙары (робағи, ғәзәл, ҡасидә, ҡитға, мәснәүи), проза жанрҙары (латифа, мәҡәм, мәҫәл, хикәйәт, нәҫер, ҡисса, дастан) бар.

Ошо уҡ бүлектә Р.Н.Байымов VI—XII быуаттарға ҡараған боронғо төрки шиғриәтен анализлай. Был шиғриәттең сығанағы булып Орхон һәм Йәнәсәй йылғалары арауығындағы һынташтарға ырылған руник яҙмалар иҫәпләнә. Ер йөҙөндә һирәк осрай торған был ҡомартҡы күләме яғынан бәләкәй һәм ҙур яҙманан тора. Һәйкәл ҡомартҡыла боронғо төркиҙәрҙе Ҡытай баҫҡынсыларының иҙеүенән ҡотҡарыусы һәм Көнсығыш төрки ҡағанатының бойондороҡһоҙлоғон аяҡҡа баҫтырыусы яу батырҙарының ҡаһарманлығы тураһында хикәйә ителә. Ғалим Роберт Байымов был ҡомартҡыларҙы әҙәбиәт тарихы, әҙәбиәт ғилеме күҙлегенән сығып тикшерә, жанр стилдәренә, сюжет үҙенсәлегенә байҡау яһай.

Китапта шулай уҡ VI—XII быуаттарҙағы боронғо төрки поэзияһының тәбиғәтен сағылдырыусы ”Күрәҙә китабы” (”Гадательная книга”), ”Манихей гимны”на ла шаҡтай тулы теоретик анализ бирелә.

Әҙәбиәттәрҙең үҙ-ара бәйләнештә үҫеүенә Йософ Баласағуниҙың ”Ҡутадғу билиг” (”Бәхет тураһында белем”) этик-дидактик трактаты бик ҙур өлөш индерҙе. Был ҙур монументаль хеҙмәт 6500 бәйеттән, 13000 шиғыр юлынан тора. Әҫәрҙең төп маҡсаты — әҙәпкә, тормош һабаҡтарына өйрәтеү. Шулай уҡ унда төрлө фәнгә (математика, астрономия, медицина) ҡағылышлы мәғлүмәттәр ҙә, дәүләт, ғәскәр менән

етәкселек итеү тураһында кәңәштәр ҙә ҙур урын алған. Ғүмерҙе нисек итеп бәхетле йәшәү ҡанундары әҫәрҙең төп үҙәгендә тора. Шуны ла әйтергә кәрәк: ”Ҡутадғу билиг” әҫәренең күсермә-тәржемәләре уйғыр, ғәрәп яҙмаларында ла һаҡланып ҡалған. Әҫәрҙең төрки телле вариантында иран телле дини һәм донъяуи байтаҡ геройҙар сағылдырыла. Мәҫәлән, ”Авеста”лағы һәм Фирдәүси тарафынан ижад ителгән ”Шахнамә”ләге легендар-мифологик геройҙар Зоххаҡ, Афрасияб, Искәндәр, Хосрау, Нуширван был әҫәргә лә индерелгән. Күрәһең, ”Ҡутадғу билиг” ғәрәп-фарсы эпик поэзияһының йоғонтоһонда яҙылған. Дөйөм алғанда, был әҙәби ҡомартҡы мәснәүи үлсәмендә (ҙур эпик әҫәр; ҡуш (эске) рифмалы бәйет) яҙылһа ла, унда ғәрәп-фарсы поэтикаһынан үҙләштерелгән аруз, ғәзәл, ҡасидә йәки робағи стилен дә осратырға мөмкин.

Артабан Роберт Байымов төрки этнокультураһында ҙур урын биләгән Мәхмүд Ҡашғариҙың ”Дивану лөғәт әт-төрк” (”Төрки һүҙҙәре йыйылмаһы”) әҫәренә анализ яһай. Билдәле булыуынса, был йыйылма төрки телдәрҙең аңлатмалы һүҙлегенән генә тормай, ә төрки телле халыҡтарҙың тотош этнокультураһы (тарихы, ғөрөф-ғәҙәте, этнографияһы) менән бергә, әҙәби әҫәрҙәрҙе үҙ эсенә алған үҙенсәлекле ҡомартҡы ла. Төрө буйынса әҫәр кәрәҙле композицияға ҡоролған. Һәр кәрәҙҙә төрлө яуҙарҙы һүрәтләгән, батырҙарҙы данлаған, шулай уҡ мөхәббәткә, тәбиғәт күренештәренә, хайуандар донъяһына һәм башҡаларға арналған лирик әҫәрҙәр, дүрт юллыҡ, ике юллыҡ шиғырҙар, нәсихәттәр урын алған.

***

Профессор Р.Н.Байымовтың ”Великие лики и литературные памятники Востока” китабы фарсы телле әҙәбиәттең боронғо осоронан алып төрки телле әҙәбиәт менән үҙ-ара бәйләнешен өйрәнеүгә арналған. Ул бәйләнештәрҙең дөйөм сығанағы, боронғо сығанағы итеп зороастризм тәғлимәтен үҙ эсенә алған ”Авеста” китабын иҫәпләй автор.

”Авеста” — изге китап. Ул — Ахура-Мазда исемле Раббы тарафынан пәйғәмбәр Заратуштраға (Заратустра, Зардушт) ебәрелгән, күктән төшөрөлгән дини тәғлимәт. Роберт Байымов үҙенең китабының икенсе бүлеген ”Авеста”ның тәбиғәтен асып биреүгә арнаған. Автор ”Авеста”-ның барлыҡҡа килеү, яҙылыу сәбәптәрен асыҡлай. Бына ул төп сәбәптәрҙең береһе: барлыҡ Хорезм һәм уға йәнәш биләмәләрҙә йәшәгән халыҡтар Молох исемле һуғыш аллаһына табынғандар. Бындай табыныу рәүешен Вавилонға, Иранға, Хорезмға ассирия халыҡтары — баҫҡынсылар һәм уларҙың башлыҡтары (башкиҫәрҙәре) алып килгән. Һуғыш аллаһын данлаған руханиҙар үҙҙәренең аяуһыҙлығы, шәфҡәтһеҙлеге менән халыҡтарҙы дер ҡалтыратып тотҡан. Һуғыш аллаһына балаларҙы, өлкәндәрҙе ҡорбан итеп торғандар. ”Авеста” тәғлимәте ошо яуызлыҡҡа ҡаршы сыға.

Роберт Байымовтың билдәләүенсә, ”Авеста” бер нисә китаптан торған. Шуларҙың бары тик дүртәүһе (”Вендидат”, ”Висперед”, ”Ясна”, ”Яшты”) беҙҙең көндәргә килеп еткән. Автор ”Авеста”ның донъяуи диндәргә мөнәсәбәтен, шул тәғлимәткә нигеҙләнеп ижад ителгән тәүге әҙәби башланғыстарҙы ентекләп өйрәнә. Шулай уҡ ”Авеста”ла әйтелгән Вар ҡалғаһен ”Арҡайым”, ”Ҡуй ҡырылған ҡала” ҡаласыҡтары (городище)

менән сағыштырып ҡарай. Был ҡәлғәләрҙең уртаҡ һәм айырмалы яҡтарын күрһәтә. Әммә шуны ла әйтергә кәрәк: ғалимдарҙың билдәләүенсә, Арҡайым — беҙҙең эраға тиклем XVIII—XVI быуаттарҙа төҙөлгән архитектура ҡомартҡыһы. Дини тәғлимәт булараҡ, ”Авеста” ни бары VII—V (беҙҙең эраға тиклем) быуаттарҙа барлыҡҡа килгән. Шуға күрә ”Авеста”ла әйтелгән Вар ҡәлғәһе менән Арҡайымдағы генетик оҡшашлыҡтың булыуы зороастризмдың тәүдинлегенә шик тыуҙыра.

Авторҙың әйтеүенсә, ”Авеста” (зороастризм) тәғлимәте ассирия диненә ҡарағанда юғары әхлаҡлылыҡты, әҙәплелекте яҡлай. Р.Н.Байымов быны фактик материалдар менән иҫбатлай, ”Авеста” китабының төрлө өҙөктәренән миҫалдар килтерә. Улар фәһемле лә, ғибрәтле лә. Бигерәк тә тамуҡ һәм ожмах тураһындағы фараздар иғтибарҙы йәлеп итә. Мәҫәлән, зороастризм әҙәбиәтенең ”Аҡыл рухының фаразламаһы” (”Суждения Духа разума”) тигән китапта шундай юлдар бар: ”Яла яҡма, юҡһа ялған данға һәм гөнаһҡа юлығырһың, яла яғыу сихырсылыҡтан насарыраҡ. Ҡомһоҙланма, юҡһа һаранлыҡ иблисенән алданырһың, ерҙәге бәхеттең ҡәҙере китер, күктәгеһен юғалтырһың. Кешеләргә асыу-ярһыуыңды сығарма, юҡһа үҙеңдең эштәреңде, изге ғәмәлдәреңде онотторһоң. Көйәләнмә, юҡһа ерҙәге һәм күктәге шатлығың юҡҡа сығыр, йәнең һәм тәнең зыян күрер. Нәфсегә бирелмә, юҡһа ҡылған ғәмәлдәрең үҙеңә үк зыян һәм үкенес килтерер. Көнләшмә, юҡһа тормошоңдоң йәме китер. Йоҡоға баш бул, юҡһа эшләйһе эштәрең, ғәмәлдәрең тамамланмай ҡалыр”. Бына ҡайҙа ята икән юғары әхлаҡлылыҡтың кешелек дәүеренәсә ныҡынған нигеҙҙәре! Бындай тәғлимәт барҙа ”коммунизм төҙөүсенең әхлаҡ кодексы” ары торһон.

”Авеста”нан күренеүенсә, ожмахтың да өс баҫҡысы бар икән: беренсеһе — изге уйҙар, икенсеһе — изге һүҙҙәр, өсөнсөһө — изге ғәмәлдәр. Тимәк, ошо үлсәмдәргә лайыҡ икәнһең, һинең йәнең ожмахтың түрендә булыр, тигән мәғәнә һалынған.

Профессор Р.Н.Байымовтың был хеҙмәте ана шулай күҙәтеүҙәргә, Көнсығыш рухи мираҫының тәрән мәғәнәһен һәм әһәмиәтен асып биреүгә ҡоролған. Шуға күрә ғәжәйеп бер күркәм әҫәрҙе уҡығандай, күңел донъяңа мәғәнә һалғандай тояһың үҙеңде.

***

Хеҙмәттең өсөнсө бүлегендә Роберт Байымов боронғо һинд әҙәби ҡомартҡыларына анализ яһай. Бында Вишнушармандың ”Панчатантра” (”Биш китап”) әҫәре айырыуса иғтибарҙы йәлеп итә. Авторҙың фаразлауынса, ”Панчатантра”, бәлки, яҙылмаған да булыр ине, әгәр шундай бер осраҡ килеп сыҡмаһа.

Бер батшаның өс улы була. Улар фән нигеҙҙәрен өйрәнеүҙән баш тарта. Батша быны күрә йөрөй. Бер көндө ул янына вәзирҙәрен саҡыра ла, ана шул хәлде һөйләп бирә:

— Һеҙгә мәғлүм: балаларым минең фәндән ситләште, шуға ла аҡылдан мәхрүмдәр. Шуларға ҡараһам, байлығым да мине һөйөндөрмәй. ”Быҙауламаған, һауҙырмаған һыйырҙан ни фәтүә” тигәндәй, наҙан, хөрмәт итмәгән, ялҡау баланан да файҙа юҡтыр. Уларҙың аҡылдарын уятыу йүнен күрһәгеҙсе.

Бер-береһен бүлдерә-бүлдерә вәзирҙәр кәңәш бирә башлай.

— Аллаһ йәнәптәре! Кешеләр ун ике йыл буйы тик грамматиканы өйрәнәләр. Шул ғилемгә ирешкәс кенә, тормош аҡылын үҙләштерә башлайҙар. Шул саҡта ғына уларҙың аҡылдары асыла.

Бер вәзир бының менән килешмәй үҙенең һүҙен әйтергә баҙнат итә:

— Аллаһ йәнәптәре! Ғүмер мәңгелек түгел, ә телмәр фәнен кеше оҙаҡ өйрәнә. Улдарығыҙҙың аҡылын тиҙерәк уятыу сараһын күрергә кәрәк. Бында Вишнушарман тигән бер кеше бар. Күп фәндәр буйынса теше сыҡҡан зат. Улдарығыҙ менән шул кеше шөғөлләнһә, улар тиҙ арала аҡылға эйә булыр.

Батшаға был кәңәш оҡшап ҡала. Улдарын ул һикһән йәшлек Вишнушарман тәрбиәһенә бирә. Был аҡһаҡал батша балалары өсөн биш китап яҙа. Бына уларҙың исемдәре: ”Дуҫтарҙың айырылыуы”, ”Дуҫ-иштәр табыу”, ”Ҡарғалар һәм өкөләр тураһында”, ”Булғанды юғалтыу”, ”Уйланмай ҡылынған эш”. Ошо китаптарҙы Вишнушарман брахман (һиндтәрҙә юғары ҡатлам кешеһе, жрец) батша балаларына уҡырға бирә. Китаптар уларға шул тиклем ныҡ тәьҫир итә, батшаның аңра балалары тиҙ арала тормош һабаҡтарын үҙләштерә, үҙ тиҫтерҙәрен ҡыуып та үтә. Ниндәй сихри китаптар һуң былар? Профессор Р.Н.Байымов шул биш китаптың һәр береһенә анализ яһаған. Китаптарҙағы дидактик материал һәм тәрбиәүи мәғәнә шуныһы менән иғтибарға лайыҡ: унда хикәйәләр кәрәҙ эсендә кәрәҙ принцибында бирелгән. Хикәйәләрҙең композицияһы үҙенсәлекле. Бер хикәйә тамамланмаҫ борон икенсеһе, йә өсөнсөһө һәм башҡалары башланып, тәүге хикәйәләге мәғәнәне көсәйтеп килә-килә лә, аҙаҡтан ғына, йәғни бер нисә хикәйәнән һуң ғына тәүге хикәйә тамамлана. Баланың фекерләү һәләтен үҫтереүҙең нигеҙе бына ҡайҙа ята ул! Билдәле булыуынса, уйҙан, мәғәнәнән асыл тыуа. Асыл (образ) аҡыл эшмәкәрлеген әүҙемләштерә. Тимәк, Вишнушармандың ”Панчатантра” әҫәре, психологик-дидактик маҡсатта яҙылып, бөгөнгө көндә лә үҙенең мәғәнәһен юғалтмаған. Белем һәм тәрбиә биреүҙең ғүмере оҙон, сикһеҙ. Иғтибар итегеҙ: ”Панчатантра” беҙҙең эраның IV быуатында яҙылған.

Шуны ла әйтергә кәрәктер: Вишнушармандың ”Биш китаб”ын анализлағанда ғалим Байымовҡа яҙыусы Байымов, уҡытыусы Байымов ярҙам итә һымаҡ. Бер кешелә өс һәләттең булыуы ”Биш китап”тың тәрән мәғәнәһенә, поэтикаһына, сюжеттар ҡатлансығына, үҙенсәлекле композицияһына үтеп инергә ярҙам итә, күрәһең. Кәрәк урында хикәйәләрҙән үрнәктәр ҙә килтерелә. Шунлыҡтан ғалимдың фәнни анализы ла ялҡытҡыс түгел.

Өсөнсө бүлектең аҙағында яҙыусы Роберт Байымов Көнсығыштың рухи ҡомартҡыларында мөхәббәт һәм ҡатын-ҡыҙ мөнәсәбәттәренә ҡағылышлы проблемаларҙы яҡтырта. Мөхәббәт темаһының боронғо сығанаҡтарын, уларҙың кешелек донъяһындағы урынын, әҙәбиәттәргә, заманға күсәгилешлеген ентекләп һүрәтләй.

***

Боронғо һинд әҙәбиәтендәге рухи ҡаҙаныштар фарсы телле әҙәбиәттең үҫешенә лә ыңғай йоғонто яһай. Быға беҙ профессор Р.Н.Байымовтың ”Великие лики и литературные памятники Востока” тигән әҙәби

энциклопедик хеҙмәтенең дүртенсе бүлегендә юлығабыҙ. Был бүлек, ”Урта быуаттарҙағы фарсы телле әҙәбиәт” тип аталып, хеҙмәттең иң ҙур өлөшөн алып тора.

Фарсы телендә иран әҙәбиәтенең формалашыу осоро илдә барған ҡаршылыҡлы тарихи ваҡиғалар менән бәйле. Хеҙмәттән күренеүенсә, биш быуат һуҙымында (III—VII быуаттар) зороастризм тәғлимәтенә нигеҙләнгән иран Сасанидтар дәүләтенең сәскә атҡан сағы. Әммә VII быуат баштарында яңы дини тәғлимәт — Ислам барлыҡҡа килә. Ислам байрағы аҫтында ғәрәптәр күрше дәүләттәрҙе, шул иҫәптән иран телле ҡәбиләләрҙе лә яулап ала башлай. Баҫып алынған биләмәләрҙә ғәрәп хәлифәте яңы динде ҡабул итергә ҡуша. Шул сәбәпле урындағы халыҡтың ғөрөф-ғәҙәте, мәҙәниәте эҙәрлекләүгә дусар була. Ислам динен ҡабул иткән биләмәләрҙә рәсми тел итеп, мәҙәниәт һәм әҙәбиәт теле итеп ғәрәп теле индерелә. Ике быуат буйы Иран ҡәбиләләре сит тел, сит әҙәбиәт баҫымы аҫтында көн күрә. Шулай ҙа халыҡ күңелендә азатлыҡ өсөн көрәш ялҡыны һүнмәй. IX быуатта Саманидтар династияһының иран дәүләте барлыҡҡа килә. Рәсми (дәүләт) тел итеп, дарий-фарсы телендә аралашҡан иран ҡәбиләләренең теле ҡабул ителә. Ошо телдә иран әҙәбиәте үҫә башлай. Уның нигеҙ һалыусыһы булып Рудаки (Абу Абдаллах Джафар Рудаки) иҫәпләнә.

Р.Н.Байымов Рудакиҙың тормош юлына һәм уның ижадына байҡау яһай. Абу Абдаллах Рудаки халыҡ араһында тиҙ танылыу яулай. Уның шиғырҙары халыҡ күңеленә яҡын була. Рудаки, халыҡ ниндәй телдә аралашһа, шул телдә ижад итә. Халыҡтың йәнле һөйләү теле булып дарий-фарсы теле иҫәпләнә. Шул телдә яҙылған әҫәрҙәре менән ул халыҡ күңеленә үтеп инә. Әҙәбиәттә халыҡсанлыҡ тигән принцип, бәлки, Рудаки заманынан уҡ киләлер ҙә. Уның шиғриәте ябай, тәбиғи, ҡатмарлы метафораларҙан, хөрәфәттән, донъяуи булмаған нәмәләрҙән азат, халыҡтың йәшәү рәүешенә ауаздаш. Ҡасидә жанрында (бер төрлө рифмалы маҡтау шиғыры) ижад иткән әҫәрҙәрендә Рудаки тыуған төйәген, тәбиғәтен, хеҙмәт кешеләрен данлай. Изгелек менән яуызлыҡ темаһы ла уның ижадында ҙур урын биләй. Рудакиҙың бөйөклөгө, бәлки, шундалыр ҙа: ул Көнсығыш әҙәбиәтендә (ғәрәп-иран) киң таралған робағи, ҡасидә, мәснәүи, ғәзәл, ҡитға һәм башҡа поэтик формаларҙы дарий-фарсы телендә яңынан эшкәртә, ерле материал нигеҙендә камиллаштыра, классик өлгө рәүешенә еткерә.

Профессор Р.Н.Байымов был бүлектә ”Фарсы телле классиканың барлыҡҡа килеүе”, ”Суфыйсылыҡ һәм суфыйсылыҡ әҙәбиәте”, ”Волга буйы һәм Урал әҙәбиәттәрендә суфыйсылыҡтың таралыуы” тигән проблемаларҙы ла киң яҡтырта. Ана шул әҙәби күренештәргә әҙәбиәт белгесе күҙлегенән анализ яһала.

Артабан автор фарсы телле иран әҙәбиәтенең бөйөк балҡыштары, сығанаҡтары булған Фирдәүси һәм уның мәшһүр ”Шахнамә” әҫәре, Омар Хәйәм һәм уның данлыҡлы ”Робаят”ы (”Ынйы күҙҙәре”), Низами һәм уның атаҡлы ”Хөсрәү үә Ширин” әҫәре, Саади һәм уның тәрән мәғәнәле ”Боҫтан” (”Емеш баҡсаһы”), ”Гөлөстан” (”Гөл баҡсаһы”) әҫәрҙәре, Хафиз һәм уның ижады менән таныштыра.

***

”Великие лики и литературные памятники Востока” тигән хеҙмәтенең бишенсе бүлеген Роберт Байымов Көнсығыш прозаһына арнаған. Бүлектә Унсуралмаали Кай-Кавустың ”Кабуснамә” (”Кабус китабы”) әҫәренә анализ яһай. Был әҫәр 1082—1083 йылдарҙа яҙылған. ”Кабус китабы” ҡырҡ дүрт бүлектән, илле алты хикәйәнән тора. Көнсығыш прозаһы ла кешеләргә әҙәп-әхлаҡ тәрбиәһе биреүҙе, тормошто танып белеү юлдарына өйрәтеүҙе маҡсат итеп ҡуя. Хаҡ яҙмышҡа күндереү, уның һабаҡтарына өйрәтеү боронғо Көнсығыш дидактикаһының төп нигеҙелер, күрәһең. Унсуралмаали Кай-Кавус та был әҫәрен үҙенең улы Гиланшахҡа тәрбиә биреү ниәтенән сығып яҙа. Балаға тәрбиә биреүҙең башы үҙ ырыуыңдың нәҫел тамырҙарын аңлауҙан, шәжәрәләрҙе белеүҙән башлана. ”Аҡыллы бул, балам, нәҫел-ырыуыңды бел”, ”Был донъя, баҫыу һымаҡ, ни сәсһәң, шул уңа”, ”Аҡыл менән байырға тырыш. Аҡылың барҙа нимәгә булһа ла өйрән. Белекһеҙ аҡыл — күлдәге йәки йөҙө булмаған кешелер. Белем — аҡылдың төҫө, тип юҡҡа әйтмәгәндәр”, ”Нәҫел-ырыуың данлыҡлы булһа ла, үҙең дә таныҡлы булырға тырыш... Бөйөклөк аҡылда һәм белемдә”, ”Барлыҡ һәләттәрҙән иң яҡшыһы — телмәрҙер... Кеше хайуандарҙан шул яғы менән айырыла: уның тәнендә ун төрлө тойоу (бишәүһе эстән, бишәүһе тыштан) бар. Эске тойоуҙың бишәүһенә фекерләү, хәтер, хыял, әйберҙе берећенән икенсеһен айыра белеү, телмәр инә. Тышҡы тойоуҙың бишәүһенә ишетеү, күреү, һиҙеү, тойоу, тәм ҡарай... Кеше — хайуандарҙың батшаһы һәм бойороусыһы... Телмәргә өйрән, сәсән бул. Телең һөйләгәнде ҡолағың ишетһен. Һүҙе татлы булғандың изгелек теләүселәре лә күп була... Татырлы ергә бер ни ҙә сәсмә, барыбер уңмаҫ, алама кешеләргә изгелек ҡылма, барыбер һине аңламаҫтар”, — тип, Унсуралмаали үҙ балаһын тормош һабаҡтарына өйрәтә. Сал тарихтың ғәмле ауаздары бөгөнгө көндә лә фәһемле һәм ғибрәтле.

Профессор Роберт Байымов ”Кабус китабы”ның һәр бүлегенән өҙөктәр килтереп, уларға үҙенең ҡарашын, мөнәсәбәтен белдерә. Ғалимдың тикшеренеүҙәренән күренеүенсә, Көнсығыш прозаһының дидактик тәбиғәте бөгөнгө көндә лә үҙенең актуаллеген юғалтмаған. Унсуралмаалиҙың мәҡәл, әйтемгә бәрәбәр һәр һүҙе, әҙәп-әхлаҡ һабаҡтары донъя әҙәбиәте поэтикаһын байытыуҙа, һис шикһеҙ, ҙур роль уйнауын күрмәү мөмкин түгел.

***

”Көнсығыш (фарсы, ғәрәп) поэтикаһы традицияларында төрки телле әҙәбиәттең барлыҡҡа килеүе” — хеҙмәттең алтынсы бүлеге шулай тип атала. Был бүлек тулыһынса Алишер Науаиҙың тормош юлын һәм ижад мираҫын өйрәнеүгә арнала, аҙаҡтан уның поэма-мәснәүиенән (”Смятение праведных”) өҙөк килтерелә. Роберт Байымовтың тикшеренеүҙәренән күренеүенсә, төрки телле әҙәбиәттең аяҡҡа баҫыуында шул осорҙоң йәшәү рәүешендә, күркәм һүҙ донъяһында ныҡлы тамыр ебәргән иран телле әҙәби традициялар һәм шул әҙәбиәт һағындағы юғары даирә вәкилдәренең төрлөсә баҫымы кәртә булып торған. Мәҫәлән, элита теле иҫәпләнгән иран телен белмәгәнгә күрә, Науаи төрки телендә ижад итә икән, тип шағирҙы кәмһетергә тырышалар. Быға ҡарап ҡына

Алишер Науаиҙың төрки телле әҙәбиәт булдырыу теләге һүрелмәй. Киреһенсә, сәмләнеп ижад итә. Асыҡтан-асыҡ үҙ исемен ҡуйып (тәүҙәрәк псевдоним ҡуллана), төрки телендә ”Аҡыл хазинаһы” (”Чар диван”) тигән ҙур йыйынтығын сығара. Профессор Роберт Байымовтың әйтеүенсә, төрки телле шиғриәт, әҙәбиәт булдырыуҙа Алишер Науаиға быуаттар һуҙымындағы бай традициялар ныҡ ярҙам итә. Әйтәйек, Йософ Баласағуниҙың төрөк-уйғыр телендә ижад ителгән ”Ҡутадғу билиг” (”Ҡот китабы”), Мәхмүд Ҡашғариҙың ”Төрки телдәр һүҙлеге”, шулай уҡ Әхмәт Йәсәүи, Атои, Саккоки, Әмири, Дурбәк, Лотфи, Хөсәйен Байҡара һәм башҡа нәфис һүҙ оҫталарының әҫәрҙәре төрки әҙәби телендә төрки халыҡтарының профессиональ әҙәбиәтен аяҡҡа баҫтырыуҙа ныҡлы таяныс була.

Төрки телендә ижад итеүгә әҙерлек осоронда Науаи фарсы-ғәрәп әҙәби мираҫын, жанрҙарын, шиғыр яҙыу теорияһын һәм техникаһын ныҡлап өйрәнә. Туған телдең күркәм мөмкинлеген файҙаланып, Алишер Науаи төрки шиғыр төҙөлөшө буйынса махсус трактат яҙа. Уны ”Көй үлсәмдәре” (”Мизан әл авзан”) тип атай. Йәштәрҙе, фарсы телен һәйбәт белеүҙәренә ҡарамаҫтан, үҙ туған телендә ижад итергә өндәй. Уның ”Көй үлсәмдәре” китабы йәштәр өсөн методик әсбап вазифаһын башҡара, сөнки уның нигеҙенә бөйөк шағирҙың үҙ поэтик тәжрибәһе һалынған. Аҙаҡтан ул, туған поэтик телмәрҙе яҡлап, ”Ике телдең бәхәсе” (”Спор двух языков”) тигән мөһим трактатын ижад итә. Быныһы ла шағирҙың үҙ тәжрибәһе нигеҙендә яҙыла. Был әҫәрҙә ике тел (иран һәм төрки) бәхәсләшә. Науаи үҙенең әҫәрендә лингвист булараҡ сығыш яһай. Төрки теленең иран теленән һис тә кәм булмауын, ҡайһы саҡта уның хатта яҡшыраҡ та икәнен иҫбатлай. Әлбиттә, шағир өсөн үҙенең туған тел сәхрәһе, ундағы тәрән мәғәнәле һүрәтләү саралары, фәһемле мәҡәл-әйтемдәре һәм башҡа поэтик осҡон-балҡыштары ҡәҙерле лә, яҡын да.

***

Хеҙмәттең йомғаҡлау өлөшөндә ”Көнсығыш әҙәбиәте һәм үҙ-ара йоғонто проблемалары” байҡала. Донъя әҙәбиәттәрендәге үҙ-ара бәйләнеш, бер-береһенә тәьҫир итеү ынтылышы булған, бар һәм буласаҡ. Нәфис һүҙ, күркәм поэтика бер тамырҙан ғына үргенләп үҫеп китә, үҙ балҡышын кеше хәтеренә, күңеленә һарылдыра алмайҙыр. Уның милли сығанағы ни тиклем көслө булмаһын, сит мәҙәниәттең сағыу өлгөнурҙарынан рухи моң үҙләштермәйенсә, үҙаллы әҙәбиәт донъяһын балҡытмаясаҡ. Әҙәбиәттәр үҙ-ара бәйләнештә үҫә, ныға. Роберт Байымовтың хеҙмәтенән күренеүенсә, һинд эпик әҫәре ”Панчатантра” (”Биш китап”), авторы онотолоп, бер телдән икенсе телгә, унан өсөнсө һәм башҡа телдәргә тәржемә ителеп, Көнбайыш әҙәбиәттәренә килеп инә. Был күренеште нисек аңлатырға? Донъя цивилизацияһы ҡайҙан башлана? Әйтәйек, ”Биш китап” донъяның алтмыш-етмеш теленә тәржемә ителә, уның ике йөҙ варианты билдәле. Көнсығышта тәрән тамырҙарын ебәргән башҡа әҙәби ҡомартҡылар ҙа донъя әҙәбиәттәренә үҙенең рухи көсөн бирә. Әҙәбиәттең төп тәғәйенләнеше — әҙәпкә, әхлаҡ ҡанундарына өйрәтеү. Бының асылына, мәғәнәһенә Көнсығыштың сағыу телмәр поэтикаһы төшөндөрә. Әҙәбиәттәрҙә форма, йүнәлеш үҙгәреп

торорға мөмкин, әммә уның төп әрәсәһе, тәғәйенләнеше, халыҡтарҙың йәшәү рәүешенә ҡот, мәғәнә биреп, үҙгәрмәйәсәк.

Роберт Байымов Көнсығыш әҙәбиәтенең сағыу биҙәктәрен башҡорт әҙәбиәтендә лә күрә, уларға анализ бирә. Мәҫәлән, Мәжит Ғафури, Шәйехзада Бабич, Сәйфи Ҡудаш әҫәрҙәрендә Көнсығыш поэтикаһын тоҫмаллап булһа, Авзал Таһиров, Дауыт Юлтый, Имай Насыри, Ғәйнан Хәйри романдарында Көнсығыш менән Көнбайыш поэтикаһының ижади үҫтерелешен (синтезын) күрәбеҙ.

Артабан Роберт Байымов был хеҙмәтте яҙған саҡта файҙаланылған әҙәбиәт исемлеген килтерә. Китаптың иң һуңында ҡушымта рәүешендә ”Көнсығыш әҙәбиәте” курсының киңәйтелгән программа материалы бирелә. Программаға ингән һәр һорау, проблема Көнсығыш поэтикаһы хаҡында киң белешмә рәүешендә сағылдырылған.

Китаптың һуңғы битен яптым да, оҙаҡ ҡына уйланып ултырҙым. Быныӊ сәбәбе ”Көнсығыш әҙәбиәте” тигән ҙур проблеманың ошондай киң күләмдә башҡорт әҙәбиәте ғилемендә быға тиклем яҡтыртылмай килеүендәлер, күрәһең. Шуға күрә ҡырҡ табаҡҡа яҡын бындай фундаменталь хеҙмәттең авторына ҡарата оло ихтирам менән бергә, ҡайһы бер бәләкәй генә һорауҙарым да бар. Булмаһа, шуларҙың бер-икеһен әйтеп үтәйем. Мәҫәлән, үҙ халҡының берҙәмлеген ҡаҡшатыусы дошмандарға ҡаршы көрәшеүсе һәм еңеүсе яугирҙарҙы, яу ҡаһармандарын, халыҡ менән оҫта етәкселек итеүсе, халыҡ мәнфәғәтен ҡайғыртыусы хандарҙы аллалаштырыуҙы *еретик ағым, манихийлыk* (йәшәп килгән дингә ҡаршы сығыусы ағым) тип ҡарау дөрөҫлөккә тап киләме икән? Бындай ҡарашты Көнсығышты өйрәнеүсе урыҫ ғалимдары яҙа һәм шунан тайпылмайҙар. Быныӊ менән улар художестволы фекерләүҙең тарихи үҫешен дөрөҫ яҡтыртмайҙар, минеңсә. Әйтәйек, батырҙарҙың, хандарҙың көсөн, бөйөклөгөн нисек һынландырырға кәрәк? Шул осор күркәм фекерләү кимәле өсөн аллаға тиңләү, ҙурлауҙың, ололауҙың иң ҡулай алымы түгелме икән?

Профессор Р.Н.Байымовтың был хеҙмәте, монографик тикшеренеүҙәре студенттар өсөн дәреслек вазифаһын башҡара. Әйтергә кәрәк, бындай тәрән йөкмәткеле хеҙмәт үҙенән-үҙе барлыҡҡа килмәгән. Уның төп сығанаҡтары бик күптер. Автор Көнсығыш әҙәбиәтенә, культураһына ҡағылышлы урыҫ телендә донъя күргән хеҙмәттәрҙе файҙаланған. Быныӊ менән мин нимә әйтмәксемен? Көнсығыш шиғриәтенең үҙенсәлекле моң поэтикаһы, шиғыр төҙөлөшө, ритмикаһы, рифмалар системаһы тураһында автор урыҫсаға тәржемәләрҙән сығып һүҙ йөрөтә. Был юл менән Көнсығыш поэзияһы йәйғороноң һәр нурына, биҙәгенә үтеп инеп буламы икән? Әҫәрҙең төп нөсхәһенә бәрәбәр сифатлы тәржемәләр табыу кәрәктер. Ни тиклем абруйлы тәржемә булмаһын, уның милли һуты, ялҡыны, төҫө барыбер юғала. Тәржемә — ул әҫәрҙе яланғаслатыу, йә икенсе кейемгә (әлбиттә, яҡшыһына түгел) төрөү менән бер.

Тәржемә тигәс, Һәҙиә Дәүләтшинаның ”Ырғыҙ” романы иҫкә килеп төштө. Был әҫәрҙең урыҫ теленә тәржемәһен иғтибарлап берәйһе бер уҡып ҡаранымы икән тигән һорау тыуа. Әҫәр урыҫсаға шул тиклем насар тәржемә ителгән. Тәржемәсеһе — В.Васильевский. Романдан бәләкәй генә бер өҙөк һәм уның урыҫсаға ауҙарылған вариантын килтерәм:

”Муйыл яулыҡ осондағы бер семтем тоҙҙо усына ҡағып алып, мейес соҡалағындағы бер ағас ҡалаҡҡа бушатып, өҫтөн сепрәк менән ябып ҡуйҙы. Үҙе һүҙендә булды:

— Бына, тине, ете төн уртаһында тороп барып, мәкенән бер сүместәй һыу алып ошо тоҙҙо иҙ ҙә ҡыҙыңдың ятҡан урынына һибәлә, шунан ҡалғанын таң ваҡытында алып сығып тупһаңдың тыш яғына эргәләтеп кенә ҡойоп сыҡ...”

”Муелбикэ при этих словах показывала щепоть грязной соли в стоявшей на печном карнизе плошке.

— Велела семь ночей подряд вставать в полночь, принести из проруби ковш воды и, растворивши соль в той речной воде, опрыснуть девичью постель, а остатки на заре-зореньке выплеснуть под порог, но не из избы, а со стороны сеней...”

Хәҙер инде үрнәк менән тәржемәне иғтибарлап сағыштырығыҙ. Әҫәрҙә Һәҙиә Дәүләтшиналағыса художестволылыҡ юҡ, поэтик моң юғалған, үрнәк нәфис һүрәтләү сараларынан яланғасландырылған: мәғәнә бар, асыл юҡ, һүҙ бар, образлылыҡ юҡ.

Был миҫалға мин юҡҡа туҡталманым. Профессор Р.Н.Байымов та үҙенең китабында Көнсығыш поэтикаһының үҙенсәлектәрен урыҫсаға тәржемәләрҙән бөртөкләп йыйырға тырыша. Тәржемә — сит есем. Сит есем үрнәксә балҡый алмаясаҡ. Балҡыған мәлдә лә, моң поэтикаһы булмаясаҡ, минеңсә.

Бына ошолар ине уйымдағы ҡайһы бер һорау-теләктәр. ”Великие лики и литературные памятники Востока” (”Көнсығыштың күркәм балҡыштары һәм әҙәби ҡомартҡылары”) тип аталған китап башҡорт әҙәбиәте ғилемендә яңы ҡапҡалар аса, яңы тармаҡтар, яңы ыҙандар һала. Былдай тәрән йөкмәткеле һәм нигеҙле тикшеренеүҙәрҙең мәғәнәһе һәм әһәмиәте бик ҙур. Был яҙмамдың аҙағында шул хеҙмәтте бар итеүсеһе хаҡында ла бер ауыҙ һүҙ әйтмәксемен.

Роберт Нурмөхәмәт улы Байымов — Башҡорт дәүләт университетының абруйлы уҡытыусыһы, башҡорт әҙәбиәте һәм фольклоры кафедраһы мөдире, филология фәндәре докторы, профессор, докторлыҡ диссертациялар яҡлау советы ағзаһы.

Роберт Байымов — Башҡортостан Фәндәр академияһының ағза-корреспонденты, ”Ядкәр” исемле фәнни журналдың баш мөхәррире, Башҡортостандың һәм Рәсәй Федерацияһының атҡаҙанған фән эшмәкәре.

Роберт Байымов — Башҡортостан Яҙыусылар союзы һәм идараһы ағзаһы, ”Яуап бирер көн”, ”Сыбар шоңҡар” романдарының, байтаҡ повестар һәм хикәйәләр йыйынтыҡтарының авторы, Башҡортостан Республикаһының Салауат Юлаев исемендәге дәүләт премияһы лауреаты, ”Ағиҙел” журналының редколлегия ағзаһы.

”Башҡортостан” гәзите ”Көнсығыштың күркәм балҡыштары һәм әҙәби ҡомартҡылары” хеҙмәтен ”2005 йыл китабы” тип билдәләне һәм уның авторын, гәзиттең әүҙем хәбәрсеһе булараҡ, ”Башҡортостан”дың 2005 йылғы лауреаты тип яҙып сыҡты.

Бына шундай шәхес ул ғалим, яҙыусы Роберт Байымов. Артабан да уға ижад балҡыштары, фән асыштары юлдаш булһын.